## Ижади эш.

1.Тексты уҡығыҙ һәм түбәндә бирелгән һөйләмдәрҙең ҡайһыһында уның төп фекере дөрөҫ бирелгәнлеген билдәләгеҙ.

Ике малай кемдер төшөрөп ҡалдырған алһыу алманы тротуар буйлап туп урынына типкеләп йөрөтә. Ҡабығы һыҙырылған алманың һутынан асфальт өҫтөндә эҙ ҡала. Йөрәгем һыҙылып китте, түҙмәнем, ҡаршыларына сыҡтым да иҙелгән, бысранған баҡса емешен ерҙән алдым. Теге малайҙар артымдан ҡалмай: «Беҙҙең тупты, бир! Беҙҙең тупты бир! Беҙ таптыҡ уны», - тип өҫкә менеп киләләр. Алманың ризыҡ икәнен, уны типкеләргә ярамағанды әйтеп ҡараһам да, аңламаны был балалар, бысраҡ алманы ашар өсөн алды, тип уйланылар, ахыры, йөҙҙәрен сирылтып, сәйер ҡарап ҡалдылар. Миңә ҡалһа - әлеге балалар нимәнәндер бик тә мәхрүм үҫәләр кеүек тойолдо... (З. Ураҡсин.)

1) Алманы ҡәҙерләргә кәрәк, уны типкеләргә ярамай.
2) Өлкән кешегә малайҙарҙың «тубын» тартып алырға ярамай.
3) Бысраҡ алманы ашарға ярамай.
4) Балаларҙы ризыҡты ҡәҙерләргә өйрәтергә кәрәк.

2. Тексты, үҙ фекерегеҙ менән үҫтереп, дауам итегеҙ.

3.1-3-сө һөйләмдәргә синтаксик анализ эшләгеҙ.